

Мәүлит ЯМАЛЕТДИН

# Робағиҙар

Ел шаулата урамдағы тирәкте,
Шик-шөбһәләр тырнап китә йөрәкте:
Әҙерәк шаулап, күберәк эшләп ҡалдыммы?!
Юҡһа аҙаҡ тешләп булмаҫ терһәкте.

***

Эш торһасы затлы-затлы кейемдә!
Бөтә хикмәт башындағы мейеңдә.
Килер бер көн: йыйған барлыҡ мөлкәтең
Һыпырылып тороп ҡалыр өйөңдә.

***

Ҡыҙыл эңер ҡанат йәйә урамда.
Моңһоу уйҙар өйөрөлә эргәмдә.
Милләтемә тоҫҡап атҡан гильзалай,
Буш шешәләр аунап ята сирәмдә.

***

Хыял бейек, етмәне шул буйҙарым,
Йылдың-йылы ҡатмарлыраҡ уйҙарым.
Ҡайҙа ҡалды көнөм йылдай саҡтарым?
Бер көндәй ҙә түгел хәҙер айҙарым.

***

Беҙ, шағирҙар, йылдың-йылы артабыҙ,
Дау килгәндә алда түгел, арттабыҙ.
Көллөбөҙҙө бергә ҡушһаҡ, Бабичтан
Әллә ауыр, әллә еңел тартабыҙ.

***

Уңдан-һулдан ишетеләэ: «Ағайым!
Кәңәш бирсе, нисек итеп ҡарайым?»
Күп ваҡытта үҙем һеҙҙең хәлдәмен,
Кәңәш һорап ҡайһығыҙға барайым?

***

Йәшлек үтер, ҡартлыҡ килер бер заман,
Бәлтерәтеп, кәм-хур итер бик яман.
Унынһына түҙерһең, тик йөрәгең
Йәп-йәш ҡалып, интектерер, уҙаман.

***

Хәмер килеп ояланы өйөңә,
Хужа булды йөрәгеңә, мейеңә.
Иҫеректәр иҫәпкә бар, һанға юҡ —
Күптән шуны көткән дошман һөйөнә.

***

Беҙҙән алда бөйөк заттар тыуған инде,
Уларҙы ла Ваҡыт ерҙән юйған инде.
Фани донъя даһиҙарҙы аямағас,
Беҙ, меҫкендәр, уның өсөн ни һан инде?!

***

Тағы ла бер йоҡоһоҙ төн, айлы төн,
Йәнде ҡырҡҡа телгеләгән уйлы төн.
Уйҙарыңдың осо-осҡа ялғанмай
Аҡылыңдан шашыр өсөн яйлы төн.

***

Фани донъя бирәүгә лә шәкәр түгел:
Уй уйлата, һыҙлай йөрәк, һыҡтай күңел.
Ер йөҙөндә кемгә еңел, тип һораһаң —
Фекерләүҙән мәхрүм булған малға еңел.

***

Һәр әҙәмдең был донъяла өлөшө бар,
Өлөшөнә төшә торған көмөшө бар;
Тәпәндәге балға дегет төшмәүендә
Ҡапҡастың да үҙенә күрә тейеше бар.

***

Ғүмер!
Әллә шаңдау, әллә өн булдың?
Әллә быуат, әллә ҡыҫҡа көн булдың?
Шуны уйлай башлағанда таң инең,
Уй осона сыҡмай ҡалдым — төн булдың.

***

Эскенәмде һағыш баҫты, уй баҫты,
Күрмәҫ булдым төшлөктәге ҡояшты.
Ете төндә балҡытырға көн нурын
Килсе, иркәм!
Мин бит һинһеҙ — ҡараҫҡы.

***

Тыуаһыңмы, тип кем минән һораны?
Ә һуң әжәл рөхсәт һорап торамы?
Ғәҙеллек, тип ауыҙ асма, и, бәндә! —
Тормош үҙе ғәҙелһеҙлек ҡорбаны.

***

Был донъяның ҡыҙыҡтары бөткәндәй,
Үҙемдең дә рәт ниңәлер киткәндәй.
Ерҙә һуғыш, ерҙә һуйыш, ерҙә ҡан,
Кәйефтәрем — ахырызаман көткәндәй.

***

Ҡол итергә тырышмағыҙ, батшалар!
Беҙ элекке түгел хәҙер — башҡалар.
Һеҙҙең ҡылған яуызлыҡҡа ҡарғыштар
Һис тә туҙға яҙылмаған — ташталар.

***

Ҡайҙа киттең аҙаштырып, йәш сағым,
Ҡайғыларым, һағыштарым әҙ сағым?!
Бер генә юл төҫмөрләнә. Ә унда
Ҡартлыҡ көтөп тора, йәйеп ҡосағын.

***

Һары япраҡ ҡаплай ерҙең өҫтәрен,
Ағастар ҙа ташлар инде төҫтәрен.
Кешеләрҙең йөрәгендә тәүге моң
Яралғандыр, моғайын да, көҙҙәрен.

***

Көндәр барам, айҙар барам, йылдар барам,
Был ғәмәлде туҡтатырға юҡтыр сарам.
Күбәләктәй ғүмеремдең ыҙанында
Кисәгенән иртәгәгә юлдар ярам.

***

Ҡуҡырайып ултырһаң да әле түрҙә,
Түрһеҙ өйгә барасаҡбыҙ.
Ә бит гүрҙә
Һорамаҫтар: нимә кейҙең, ниҙәр ейҙең?
Ә һорарҙар: ни яҡшылыҡ ҡылдың ерҙә?

***

Кеше ерҙә япа-яңғыҙ йәшәй алмай,
Бөртөк тамсы ҡағыҙҙы ла тишә алмай.
Яңғыҙ булыу бер Хоҙайға килешкәндә,
Усаҡтағы яңғыҙ тумрау — ул да янмай.

***

Башта шуны иҫтә тотһон ине
Батша булып торған бәндәләр:
Диңгеҙ менән дауыл бәхәсенән
Ҡаза күрә һәр саҡ кәмәләр.

***

Бәхет — ҡаҙаҡ яһаған сәй төҫлө генә —
Етмәй хатта ул кәсәңдең йөҙлөгөнә.
Аҙнаһына бер тамсылап эскәндә лә,
Еткереүе ҡыйын ғүмер төшлөгөнә.

***

Яҙҙы йәйҙәр алмаштырыр, йәй артынан көҙ килер,
Миҙгел һанап йәшәй торғас, бер саҡ шундай көн килер:
Йәнең, тормош айышына яуап эҙләп, төңөлөр,
Тәнең, уға яуап тапмай, һорау булып бөгөлөр.

***

Тыуам, тиеп тыуманым бит, ни әйтәйем?
Ғүмер үтте — тойманым бит, ни әйтәйем?
Хәҙер инде һуңғы көн дә күп көттөрмәҫ,
Ерҙә йәшәп туйманым бит, ни әйтәйем?

***

Ҡабатлайым: ай-һай, тормош, вай, тормош,
Шатлыҡҡа ла, ҡайғыға ла бай тормош.
Ниндәй генә булыуыңа ҡарамай,
Яратам бит, ауыҙыңа май тормош!

